***Фәнисә ТАЛИПОВА,***
***Аскын районы Төлгөҙбаш мәктәбенең***
***татар теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы***

# НУРМӨХӘММӘТ ЙОМРАНИ СӘСӘН


*Нурмөхәммәт Йомрани*

Сәсәнлек сәнғәтенең сәскә атыуы башҡорт ырыуҙарының бер халыҡ булып ойошоу, берләшеү дәүеренә (XVI быуат тирәһе) тура килә. Сәсән — ул һүҙ оҫтаһы, шағир-импровизатор, халыҡ йырсыһы, фәлсәфәсе һәм уҡытыусы, халыҡ тормошонда күренекле урын тотҡан йәмәғәт эшмәкәре, үткәндәр тураһында бәйән итеүсе тарихсы, йәмғиәттә абруй һәм ихтирам ҡаҙанған аҡһаҡал. Ҡобайырҙарҙа сәсән эшмәкәрлеге шулай һүрәтләнгән:

Ханға ҡаршы уҡ булған,
Бейгә ҡаршы ут булған.
Сәсән булмай, кем булһын,
Сәсәнгә тиң кем булһын?
Яманлыҡты яҡламаҫ,
Дошман хәтерен һаҡламаҫ,
Яҡшылыҡты һөйләр ул,
Яуға саҡырып өндәр ул,
Дауға саҡырып өндәр ул.

Башҡорт халҡында элек-электән йәшәп килгән сәсәнлек традициялары дауам итә. XX быуатта халыҡ араһында танылған Ғатаулла Ғәлиев (1861—1930), Ғиндулла Усманов (1875—1956), Хәйрулла Ишмырҙин (1870—1947), Вәлиулла Ҡоломбәтов (1881—1964), Сәфиулла Сәғитов (1893—1957), Сәһерьяр Муллабаев (1899—1977), Шәйҙулла Шәрифуллин (1883—1959), Ислам Смаков (1903—1980), Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев (1924) кеүек сәсәндәр бар. Уларҙың һәр береһенең ижады ҡабатланмаҫ һәм үҙенсәлекле. Шул уҡ ваҡытта уларҙың барыһын да бер уй, бер моң берләштерә. Был хаҡта Шәйҙулла Шәрифуллин (Дүртөйлө районы) бик тә асыҡ әйткән:

Сәсәндәрҙең уй-фекере халыҡ менән,
Үҙен танытыр һүҙендәге хаҡлыҡ менән.
Ҡайғырыр ул халыҡтағы ҡайғы менән
Һәм шатланыр халыҡтағы шатлыҡ менән.

Шәйҙулла Шәрифуллин, Ғиндулла Усманов, Ғатаулла Ғәлиев, Нурмөхәммәт Йомрани кеүек сәсәндәр ижадында көнбайыш башҡорттарында ла сәсәнлек традицияларының ныҡлы һаҡланғанлығы күренә.

Сәсәнлек сәнғәте — айырым кешенең шәхси ижад емеше. Башҡорт әҙәбиәтенә, мәҙәниәтенә ҙур өлөш индергән сәсәндәр араһында Нурмөхәммәт Йомрани (Кирәев Нурмөхәммәт Шаһиарыҫлан улы) ижады ла айырым урын алып тора.

Нурмөхәммәт Йомрани — сәсән шағир. Ул 1882 йылда хәҙерге Пермь өлкәһенең Октябрь районы Йомран ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Уның псевдонимы ла ауыл исеменән алынған. Атаһы Шаһиарыҫлан мәҙрәсәләр үткән кеше. Ул Нурмөхәммәтте муллалыҡҡа әҙерләгән, ҡайҙалыр ситкә ебәреп, мәҙрәсәләрҙә уҡытҡан. Осраҡлымы, түгелме, ул мәҙрәсәлә уҡыуын ташлап, рус-башҡорт мәктәбенә уҡырға керә, һәм шулай муллалыҡтан төшөп ҡалған. Был мәктәпте лә ташлап, атаһына ҡайтып күренергә ҡурҡып, башта ҡаҙаҡ далаларында, һуңыраҡ Пермь губернаһындағы һәм Башҡортостандағы башҡорт, татар ауылдарында хәлфәлек итеп йөрөгән. Өйләнгәс, Йомран ауылына ҡайтып, мәҙрәсә аса, балалар уҡытыу эшен дауам итә.

Йомраниҙың атаһы Шаһиарыҫлан тормош-көнкүрештәге, илдәге ваҡиғаларҙы яҙып бара. Шул яҙыуҙарҙы уның ейәне, күренекле ғалим, яҙыусы, филология фәндәре докторы, профессор Кирәй Мәргән (Кирәев Әхнәф Нурмөхәммәт улы) уҡый алған. Яҙыуҙар араһында шәжәрә лә була. Ул ғәрәп графикаһы менән яҙылған. «Безем нәселемез Кирәй атлы мәшһүр уҙаман ирҙән таралмышдыр. Аны мәргән тип атар булғаннар. Безем бабаларымыз ерләри Ҡараидел нәһри, Төй, Әтәр вә Ирән нәһри атрафларында ултырмыштыр. Кирәй ыруғындан Мозафар уғлан Чәрмәсән буйларына күчеп ултырмыштыр вә урман булмадығы илә ошбу илемезгә кире ҡайтмыштыр. Тушҡыр нәһүм (янында) Ҡыйғазы авылында дәфен иделмештер. Кирәй Мәргәннең уғлы Дусай, аның уғлы Асай, аның уғлы Айсыуаҡ, аның уғлы Нурсыуаҡ, аның уғлы Мозафар, аның уғлы Мортаза, аның уғлы атамыз Мөхәммәтзарифтыр». Ошо яҙма нигеҙендә Нурмөхәммәт Йомраниҙың шәжәрәһе түбәндәгесә була (115-се биттәге шәжәрәне ҡара).

Нурмөхәммәт Йомрани балаларының уҡымышлы, белемле булыуын теләгән. Улы Әхнәфте лә уҡытыусы итергә тырышҡан. Үҙе кеүек шағир күңелле, белемле итеү араһын күргән, алманың үҙ ағасынан йыраҡ төшмәүе тураһында ҡабатларға яратҡан.

Октябрь революцияһынан һуң, 1921 йылда, Нурмөхәммәт Йомрани Баҙансат ауылына күсенеп килгән. Ғүмере буйы Төй волосы ауылдарында, Баҙансат, Олойылға, Төлгөҙбашта балалар уҡытҡан, тирә-яҡта абруй яулап, дан тотҡан, үҙ заманының уҡымышлы кешеләренең береһе булған.

Нурмөхәммәт Йомраниҙың шиғырҙары һәм хикәйәләре тупланған дәфтәре ғалимдар ҡулына күптән түгел генә килеп эләгә. Уларҙы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына Пермь өлкәһенең Октябрь районы Йомран ауылынан Нәсибулла ағай Хәбибрахманов тапшырған. Шул яҙмаларҙан сығып, сәсән ижады хаҡында шаҡтай тулы фекер йөрөтә алабыҙ.

Нурмөхәммәт Йомрани — мәғрифәтсе шағир. Уның ижадында арҙаҡлы Аҡмулла йоғонтоһо һиҙелә:

Аҡмулланың әйткәндәре дөрөҫ кеүек,
Атылған уҡ башағы ҡорос кеүек.
Фәһем алһаң Аҡмулланың һүҙҙәренән,
Һәр әйткәне мең баһаға торор кеүек.

Ғүмер, уның асылы, йәшәү мәғәнәһе хаҡында уйлана шағир, кешеләр күңелен яҡтылыҡҡа, сафлыҡҡа һәм паклыҡҡа әйҙәй.

Нурмөхәммәт Йомрани ижадында асыҡ сағылыш тапҡан темаларҙың береһе — башҡорт ерҙәрен һатыуға борсолоу. Шағир ата-бабаларҙан ҡалған башҡорт ерҙәрен балалар, киләсәк быуын хаҡына һаҡларға, һатмаҫҡа саҡыра, бындай эште наҙанлыҡ, түбәнселек билгеһе, тип һанай. «Башҡорт ер һата, татар сәй һата», — ти ул үҙенең бер шиғырында һәм, иң яҡшы ерҙәрен һатып, урман-тау эсенә күсенгән ата-бабаларына зарлана, ҡан ҡәрҙәштәренән үтенә:

Әй, туғандарым, ерҙе һаҡлағыҙ,
Әрәм итмәгеҙ, ерҙе һатмағыҙ.
Белегеҙ алдан ер ҡәҙерҙәрен,
Ереңдә булһын үҙ ҡәберҙәрең.

Сәсәндең әлегә билдәле шиғырҙарының яҙылыу ваҡыты 1906—1912 йылдарға тура килә.

Йомрани шиғырҙары аныҡ ритмлы һәм рифмалы, барыһына ла тиерлек робағи рифмаһы хас. Сәсән туған халҡын аң-белемгә саҡыра. Кешеләрҙең ғәфләттән арына алмауына әсенә, Европа илдәре халыҡтарынан үрнәк алырға өндәй.

Барҙыр донъяла ҡәҙерле нәмә,
Бар халыҡ өсөн кәрәкле нәмә,
Бар ҡиммәттәрҙән иң ҡиммәтлеһе,
Һәммә көслөнән иң ҡеүәтлеһе —
Ғилемдер аты, яҡты ҡанаты,
Күралмай уны наҙандар заты.
Ғилем шиғары тора юғары,
Хурлайҙыр уны барлыҡ наҙаны.
Ғилем шиғары тора юғары,
Ынтылмай уға сирмеш вә ары.
Ғилем шиғары тора юғары,
Күралмай уны башҡорт, татары.

Аурупа әһеле барсаһы-бары,
Ғилем шиғарын элгән юғары.
Латыштар килгән, уҡыған-белгән,
Ғилем шиғарын юғары элгән.
Немецтар бар ҙа белгән-уҡыған,
Улар әсәнән күп белеп тыуған.
Ғилем шиғарын рустар ҙа алған,
Күреп уларҙан уҡырға булған.
Ғилем алырға беҙҙең ваҡыт юҡ,
Әйтәбеҙ шуға: «Кәрәге лә юҡ».
Башҡорт ер һата, татар сәй һата,
Муҡшы, сирмештәр иҫереп ята.
Белмәй ҡәҙерен тик беҙҙең халыҡ,
Шуның өсөн дә эшебеҙ арыҡ.

*("Ғилем байрағы")*

Берәүҙәр Нурмөхәммәт Йомраниҙы, «рустар менән аралашма», икенселәр — «Ҡөрьән шәриф бар, алла ҡөҙрәте, кәрәкмәй беҙгә кафыр лөғәте», өсөнсөләре, «ни өсөн һин мәктәп астың, был эшеңә юҡ амин», тип яфалай.

Ғүмере буйы балалар уҡытҡан, әммә был юлда үҙ халҡында яҡлау тапмаған Нурмөхәммәт сәсән был турала уйынлы-ысынлы шулай яҙып ҡалдырған.

Кем тиһәгеҙ, хаҡ мосолман булмаҡ өсөн
Бәке илә таҡыр итеп баш ҡырғаны,
Ҡибла табан баш борғаны, баш орғаны —
Нурмөхәммәт бин Арыҫлан әл-Йомрани.
Мәжлестәрҙә гәп һатып күп эш ҡырғаны,
Муллаларса тубыҡ сәнсеп ултырғаны,
Нотоҡ һөйләп ниғмәттәрҙән буш ҡалғаны —
Нурмөхәммәт бин Арыҫлан әл-Йомрани.
Йәһелдәрҙе уҡытам тип лаф орғаны,
Наҙан булһа ҡабат ҡайтып уҡығаны,
Мәғрифәт тип күп өлөштән буш ҡалғаны —
Нурмөхәммәт бин Арыҫлан әл-Йомрани.
Заманында мөтәкаффил ул булғаны,
Ниһайәт, мөтәкаллиф ул ҡылғаны,
Һәм, ниһайәт, мөтәхәши ултырғаны —
Нурмөхәммәт бин Арыҫлан әл-Йомрани.
Ҡайғынан һирәк-һаяҡ «аш» алғаны,
Аш тигәне буҙа булып, баш ярғаны,
Истиғмал итеп хәрәм бер ҙә юҡта
Юҡлы-барлы өлөшөнән буш ҡалғаны...

*("Үҙем тураһында")*

Үҙенең шиғырында Нурмөхәммәт Йомрани ауыл исемен шулай аңлата:

Беҙ, йомрандар, ниңә «Йомран» —
Шуны белгем килә.
Исемгә бит төрлө хайуан,
Төрлө йәнлектәр килә.
Айыу ҙа бар донъяла,
Бүре лә бар донъяла,
Донъяһын хәйләгә ҡорған
Төлкө лә бар донъяла.
Айыу була алмағанбыҙ,
Бүре була алмағанбыҙ.
Хәйлә-мәкер нәҫелдә юҡ —
Төлкө була алмағанбыҙ.
Айыу йөрөй урманда,
Урман ҡуйы булғанға.
Бөркөт оса бейектә,
Күктә иркен булғанға.
Ә беҙ ышыҡҡа инеп ятҡанбыҙ,
Һәммә яҡтылыҡтан ҡасып,
Миҫле йомран ер аҫтында
Ятабыҙ инде боҫоп.
Шул сәбәпле беҙҙәрҙе
Йомран тип атағандар,
Ошо ләҡәпте алғандар
Бер ауыл яһағандар.

*(”Йомран ауылы”)*

Нурмөхәммәт Йомрани наҙанлыҡтан ғилемлекте, таяҡтан китапты өҫтөн күрә:

Әй, йәһелдәр, әй, наҙандар,
Һеҙҙәргә әйтәм хитап!
Һеҙҙең ҡулдарҙа таяҡтар,
Минең ҡулдарҙа китап.

*(”Әй, йәһелдәр...”)*

1917 йылғы болғаныш осоронда Нурмөхәммәт Йомрани Төпрәле ауылында Сафа мулла зинданында ятҡанда ла шиғырҙар сығарған. Бына шуларҙың береһе:

Сафа мулла ялсылары тотоп алды,
Ҡулдарыма сылбыр илә бығау һалды.
Туған илем, дуҫ-иштәрем тороп ҡалды,
Муйынымды залим ҡулы быуып алды.

Ғәзиз башым, миңгерәйеп ятам бында,
Аҡ мәлғүндәр ҡулында бит мин тотҡонда,
Ысҡынырға мөмкин түгел — бығау ҡулда,
Ул, етмәһә, һалдат тора уңда-һулда.
Тиҙ килерме был зиндандан ҡотолор көн,
Бығауҙары, сылбырҙары ватылыр көн,
Сафа мулла эттәренә атылыр көн,
Ил өҫтөндә ҡыҙыл нурҙар ҡалҡыныр көн!

*("Үкенеү")*

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Нурмөхәммәт Йомраниҙың һуңғы йылдарҙағы шиғырҙары табылмаған, ә уның әүҙем ижад итеүе билдәле. «Революциянан һуң атайым, тәғлим-тәрбиә курстары үтеп, уҡытыуын дауам итте. Шиғыр яҙыуын ташламаны», — тип яҙа Кирәй Мәргән. Асылда Нурмөхәммәт Йомрани үҙе өсөн генә яҙған һәм шиғырҙарын баҫтырырға ашыҡмаған. Шиғырҙарының беҙҙең көндәргә тиклем килеп етмәүенең сәбәптәрен уның ҡыҙҙары Мөхлисә һәм Нажиәнең хәтирәләре бер ни ҡәҙәр аңлата. «Атайымдың вафатынан һуң, бик күп шиғыр дәфтәрҙәре ҡалды. Ағайым (Кирәй Мәргән) ул саҡта Өфөлә ине. 1937, 1938 йылмы икән, ағайымдан хат килде, ул унда атайымдың бөтә ҡағыҙ-дәфтәрҙәрен йәшерегеҙ, тип яҙған ине. Уларҙы кем ҡайҙа йәшергәндер», — тип хәтерләй ине Нажиә апай. Уның һөйләүенә ҡарағанда, болғансыҡ заманда Кирәй Мәргән өҫтөнән «ул Шәйехзада Бабич нәҫеленән», тип хәбәр еткереүселәр булған икән. Был раҫлау тулыһынса нигеҙле.

«Ҡартатай булған кеше — Мәсәлим исемле бай, арҙаҡлы Бабичевтар нәҫеленән һәм нисектер күренекле шағир Шәйехзада Бабичтың атаһына яҡын ғына туған тейеш була... Инәйем үҙе наҙан ғына булһа ла, Бабичева фамилияһын ташламаны. Һәр хәлдә, беҙҙең йортта Бабич культы ныҡ урын алғайны», — тип яҙа Кирәй Мәргән.

Нурмөхәммәт Йомрани дәфтәрҙәренең юғалыу сәбәптәренә ҙур асыҡлыҡ индерә был юлдар, сөнки Шәйехзада Бабич исеменә милләтселек мөһөрө баҫылған 30-сы йылдарҙа уның менән ҡан ҡәрҙәш булыу ҙа, шиғырҙарын һаҡлау, йә булмаһа үҙ яҙмаларында уның исемен генә һаҡлау ҙа оло енәйәт һаналған.

Нурмөхәммәт Йомраниҙың тормошо һәм ижады әлегә өйрәнелмәгән. Шулай ҙа туғандарының, балаларының, дуҫтарының хәтирәләренән сығып, уның шағир, сәсән, уҡытыусы, башҡорт һәм татар халҡының азатлығын яҡлап көрәшеүсе икәнлеген күрәбеҙ.

Нурмөхәммәт Йомрани 1934 йылда 52 йәшендә вафат булған. Ҡәбере — Аҫҡын районы Төлгөҙбаш ауылы зыяратында.

## Нурмөхәммәт Йомрани шәжәрәһе




